Тикшеренеү эше

# “Мәсҡәү комсомолдары”

(Тарих. Бәләкәй Тыуған илдең тарихы)



**Башҡарҙы: Учалы районы Мәсҡәү урта мәктәбенең 10 класс уҡыусыһы Мөхәмәҙиев Айнур Нил улы**

**Етәксеһе: тикшеренеү эштәре буйынса түңәрәк етәксеһе Мәүлитова Зилдә Әхмәҙиә ҡыҙы**



# Йөкмәткеhe




- Инеш
- I бүлек. Башҡортостан комсомол ойошмаhы
- II бүлек. Мәçкәү комсомолдары
- III бүлек. Волонтёрҙарҙың данлы эштәре
- Йомғаҡлау
- Ҡулланылған әҙәбиәт
- Ҡушымта: слайдтарҙан торған презентация

# Инеш

- Комсомолда эшләгән саҡта беҙ йәш инек, йырлап өмәләргә бара, йырлап йыйылыштарҙан ҡайта торғайныҡ. Һәр эшкә дәрт менән тотондоҡ. Комсомол - тормош мәктәбе булды. Октябрят, пионер, комсомол, профсоюз, партия – ошо теҙмә аша Совет осоро кешеләре үтте...






Комсомол – бик яҡшы мәктәп булған. Ул йәштәрҙе берләштерә, яуаплылыҡҡа, эшкә өйрәтә алған.



Хәйер, башҡорттоң бик күп зыялылары үҙҙәренең ҡаһарман аҙымын эшләгәндә, милләт яҙмышын хәл иткән мәлдәрендә утыҙға ла етмәгән булғандар.



- **Тикшеренеү эшенең актуаллеге** булып тыуған илемдең тормошон өйрәнеү  менән бергә,  бәләкәй тыуған илем өсөн ҡаһарман аҙымдар эшләп, милләт яҙмышын хәл итергә тырышлыҡ күрһәтеү.
- **Тикшеренеү объекты.** Мәҫкәү комсомолдары эшен өйрәнеү
- **Эҙләнеү предметы.**  Ауылым комсомолдары
- **Тикшеренеү маҡсаты.**  Тыуған еремдең тарихын өйрәнеү һәм тикшереү,  йәштәрҙе берләштерә, яуаплылыҡҡа,  эшкә өйрәтә алған комсомол эше менән таныштырыу.

- **Эҙләнеү эшенең бурыстары.**
- 1. Мәçкәү ауылы комсомолдары тураһында белешмәләр йыйыу;
- 2. Тыуған ил өсөн ҡылынған изге эш һәм батырлыҡты өйрәнеү;
- 3. Тыуған ергә һәм данлы тарихи үткәнгә һөйөү, хөрмәт, ғорурлыҡ һәм
- патриотлыҡ тойғоһо тәрбиәләү;
- 4. Ауылда волонтерлыҡ эшен йәнләндереү.
- **Эҙләнеү эшенең гипотезаһы.** Тыуған илең өсөн ең һыҙғанып эшләргә һәр ваҡыт әҙер бул!
- **Эҙләнеү эшенең методтары.**
- 1. Музейҙан кәрәкле мәғлүмәттәр алыу.
- 2. Оло быуын вәкилдәренән комсомол тураһында белешмәләр йыйыу.
- 3. Гәзиттәрҙә сыҡкан мәкәләләр ҡулланыу.

# I бүлек. Башҡортостан комсомол ойошмаһы




- Рәсәй коммунистик йәштәр союзы 1918 йылда төҙөлә, ә 1926 йылдан ул Бөтә союз ленинсы коммунистик йәштәр союзы (ВЛКСМ) исемен йөрөтә. Башҡортостандың комсомол ойошмаһы 1920 йылдың июнендә барлыҡҡа килә, 15 октябрҙә ул саҡтағы баш ҡала – Стәрлетамаҡта Беренсе Бөтә башҡорт комсомол съезы үтә. Был сарала төбәктәге 1800 комсомол исеменән 35 делегат ҡатнаша.



Съезда ҡатнашыусылар республиканың эске һәм тышҡы хәл-торошо, комсомолдың бурыстары, йәштәрҙең коммунистик интернационалы тураһындағы мәсьәләләрҙе ҡарай. 22 октябргә тиклем дауам иткән сарала шулай уҡ наҙанлыҡты бөтөрөү, коммунистик шәмбе өмәләре, үҫмерҙәр матбуғаты тураһында ла һүҙ була.






Биш йыллыҡтың тәүге осорҙарында беҙҙең РКСМ ойошмаһы республикалағы нефть ятҡылыҡтарын үҙләштереүгә «шефлыҡ» итә, Ишембай ҡалаһын төҙөүҙә ҡатнаша.





Тормош йәнләнеп китә, аслыҡтан-яланғаслыҡтан интеккән халыҡта өмөт уяна, күңелдәренә дәрт өҫтәлә. Эш кенә булһын, ауыл кешеләре ең һыҙғанып тотонорға әҙер була. Игенселәрҙең тырышлығы арҡаһында ҙур уңыш йыялар, һөт, ит етештереүҙә лә алға китәләр.



Комсомол райкомы йәштәр араһында белемлеләрҙе арттырыу буйынса ла әүҙем эшләгән. Элек халыҡ наҙан булған, тип әйтеү дөрөҫ түгел, киреһенсә, милләттәштәребеҙ рухи, дини яҡтан бик белемле булған.



Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, комсомол ойошмаһы берҙәм көс булып фашистарға ҡаршы яуға атлыға. Күптәре һуғышҡа үҙ теләге менән китә. Үкенескә ҡаршы, яуға киткән йәштәрҙең 60 проценттан ашыуы тыуған яғына әйләнеп ҡайта алмай. Тыуған иле өсөн батырҙарса һәләк булалар.



Комсомольцы-герои Великой Отечественной Войны 1941-45



ВСЕСОЮЗНЫЙ ЛЕНИНСКИЙ КОММУНИСТИЧЕСКИЙ СОЮЗ МОЛОДЕЖИ

КОМСОМОЛЬСКИЙ БИЛЕТ

№6915153

KOMSOMOL BILETЬ

№6915153

# II бүлек. Мәçкәү комсомолдары




1921 йыл. Мәçкәү ауылында кантком һәм волком тарафынан комсомол ячейкаһы төҙелә. Ойошманың секретары итеп Танһыҡбай Мөхәррәм улы Буләковты һайлап ҡуялар. Ул – минең олатайым.(уртала ултыра)

Бүләков Мөхәррәм олатайҙың 1907 йылғы **Алсынбай улы** һуғыштан ҡайтмай, хәбәрһеҙ юғалған “ҡара ҡағыҙы” ғына килә.



Ә Танһыҡбай һәм Ҡасим улдары тәүге комсомолдарҙың береһе булып, ауылды аяҡҡа баҫтырыуҙа ҙур өлөш индергән кешеләр.

(уртала Бүләков Ҡасим Мөхәррәм улы)



# Кемдәр һуң улар Мәсҡәү ауылының тәүге комсомолдары?

- Хәсән Ямалов
- Танһыҡбай Бүләков
- Ҡасим Бүләков
- Сабирйән Ишимйәров
- Юлтый Йәтимбаев
- Мәхмүт Шафиҡов
- Мөжәүир Харрасов
- Исрафил Егитов
- Мотаһар Кәлимуллин
- Хәкимйән Сәитҡужин
- Хәмбәл Бапанин
- Мөхәмәҙи Закиров
- Мәхмүт Ҡәләмбаев (Ташҡыя)
- Мөхәмәт Ситдиҡов



Исрафил Егитов



Сабирйән Ишимйәров

Мәсет ул ваҡытта дин әһелдәре ҡулында була. Уны кантон комитеты рөхсәте менән комсомолецтар үҙҙәренә алырға булалар. Ауылда шуға арнап йыйылыш үткәрәләр. Халыҡтың күпселеге риза булғас, мәсетте халыҡ файҙаһына алырға тигән ҡарар сығарыла.



1928 йылда районыбыҙға тәүге трактор килтерелә. Бөтә йәмәғәт эштәрендә лә Мәҫкәү комсомолдары беренсе урында тора. Тырышлыҡтары өсөн был ойошма Өлкә комитеты тарафынан Тамъян-Ҡатай кантонына бирелгән «Фордзон» тарҡторы менән бүләкләнә.






Комсомол ойошмаһы йылдан-йыл тулылана бара, бөтәһе лә ил өсөн тырышып эшләйҙәр. Күрһәткән эштәре өсөн радиоалғыс менән дә бүләкләнә улар. Ауыл халҡы башлап радионы күрә, һөйләүенә ышанмайҙар, Өфәгә барып, унан йырлап күрһәтәләр, тип һөйләйҙәр.



Комсомолдар үҙҙәренең артынан йәш пионерҙарҙы ла эйәртә. Пионер ойошмаһы 1926 йылда барлыҡҡа килгән. Пионерҙар араһынан да күбеһе күренекле кешеләр булып киткәндәр. 1914 йылғы Сабит Мәғәсүм улы Шакиров һуғыштан һуң райкомдың 2 секретары булып китә, 1914 йылғы Һағынбай Дәүләтбай улы Дәүләтов һуғыштан капитан булып ҡайта.





Һағынбай Дәүләтбай улы

Дәүләтов һуғыштан капитан булып ҡайта.



Сабит Мәғәсүм улы Шакиров

# Ҡасим Мөхәррәм улы Бүләков ауыл Советы рәйесе булып китә



# Хәлиҙә Әхтәмова күренекле уҡытыусы була



Бигерәк тә Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында ауылдағы пионер һәм комсомолдар фронтҡа ойоҡ, бейәләй һәм башҡа кәрәкле әйберҙәр һалып посылкалар ебәреү буйынса Учалы районында беренсе урынға сығалар.



Өфөлә 1959 йылдың июнендә колхоз, совхоздар комскомитет секретарҙарының 10 көнлөк семинарын ойоштора. Йыйынға саҡырылғандар «Йәшел сауҡалыҡ» шифаханаһында йәшәй, улар өсөн уҡыуҙан тыш баш ҡалабыҙҙың иҫтәлекле урындарына экскурсиялар, спорт ярыштары, төрлө мәҙәни саралар ойошторола.

Нәсим олатайым да был семинарҙа ҡатнаша.



Шулай итеп, комсомолдар үҙ заманында иң кәрәкле кешеләр булып, бик файҙалы эштәр башҡарғандар, Тыуған илгә тос өлөш индергәндәр.



# III бүлек. Волонтёрҙарҙың данлы эштәре

- 5 декабрь – Халыҡ-ара волонтерҙар көнө. Ул 1985 йылда Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы менән булдырылған. Кешеләр үҙҙәре теләп балалар йорттарына, һауыҡтырыу учреждениеларына бара, урамдарҙы таҙарта, башҡа социаль йүнәлештәге сараларҙа ҡатнаша.





Волонтерҙарҙың данлы эштәре тураһында гәзиттә уҡыу һәм телевизорҙа күреү ул бер эш,  хәрәкәттә ҡатнашыу, ул икенсе эш. Ярҙамға мохтаж кешеләргә изгелек ҡылыу - күңелдең юғары выжданлығы һәм матурлығы ул.



**Ә волонтер булыу өсөн нимә эшләргә кәрәк һуң?**

Тәү сиратта ихлас теләгең булыу шарт. Бер ниндәй финанс ярҙамына өмөт итмәй, бар күңелең менән кемгәлер ярҙам итеү теләге көслө булғанда ғына һинән ысын волонтер сығасаҡ!



# Йомғаклау

Мин комсомолдар ойошмаһы эшен өйрәнеп, үҙемә күп нәмәләр алдым. Мәктәптә алып барылған волонтерлыҡ эшен тағы ла йәнләндереп ебәреп, иҫән-һау йәшәгән, ярҙамһыҙ ҡалған тыл ветерандарына, оло йәштәге кешеләргә хәлдән килгәнсе ярҙам күрһәтәсәкмен.



# Кулланылған әҙәбиәт


- 1. Сулпан  Ғәлина.  “Мәҫкәү комсомолдары”,  Яйыҡ, 24.09.1996 йыл
- 2. Әлим Зарипов. “Эй Яйыҡ йорт, Яйыҡ йорт”
- 3.  Марат Назиров «Социализм тракторы»,  «Башҡортостан комсомол ойошмаһы», мәҡәләләр интернеттан алынды
- 4. Фотолар ғаилә альбомынан алынды